# Беҙҙең студент йылдары

№3 12 март, дүшәмбе 2009 йыл

Туймазы педагогия колледжының Туған телдәр бүлеге гәзите

## Бурыстар асыкланды

*Февраль баштарында “Беҙҙең студент йылдары” гәзите мөхәрририәте ултырышы булды. Ултырышты гәзитте ойоштороусы Кәримова Г.Я. алып барҙы. Кыҙҙар гәзиттең артабанғы яҙмышы хакында һөйләште. Гәзит ниндәй булырға тейеш? Ниндәй материалдар менән студенттарҙы кыҙыкһындырырға? һ.б. һорауҙар куйылды. Төрлө фекерҙәр әйтелде, шуларҙың кайһы берҙәре менән таныштырып үтәбеҙ:*

Ибраһимова Д. Гәзит мәкәләләренең тематикаһы миңә окшай. ТПК студенттары хакында кыҙыклы мәғлүмәт менән танышабыҙ. Минеңсә, артабан да ошо йүнәлештә эшләргә кәрәк. Тағын һәр номер һайын байрам менән котлап барырға мөмкин.

Мәсәлимова С. Яңылыктар менән әүҙем таныштырып барырға кәрәк. Яңы китаптар хакында белешмә бирәйек.

Абдуллина Д. Туймазыға концерттар, театрҙар йыш килә. Улар хакында материал йыйырға була. Колледжда уҙғарылған бәйге һөҙөмтәләре менән таныштырып барайык. 1-се һанындағы кеүек, бер биттә берәй төркөм хакында мәкәләләр яҙырға була.

Исмәғилева Л. Укыуға сакырыусы, укыуҙың өҫтөнлөгөн иҫбатлаусы материалдар күп булырға тейеш.

Әхмәҙиева З. Йәштәр өсөн, кыҙҙар өсөн файҙалы кәңәштәр биргән мәкәләләр ҙә гәзитте укымлы итер тип уйлайым.

Лотфуллина И. Студент шәхесен асырҙай материалдар күберәк булһын ине.

Бына ошондай фекерҙәр әйттеләр гәзитебеҙ хеҙмәткәрҙәре. Гөлнара Яхъя кыҙы ла үҙ кәңәштәрен бирҙе. Ул кыҙҙарҙы “Шоңкар”, “Йәшлек” журнал һәм гәзиттәрен укырға сакырҙы. “һеҙҙең мәкәләләрегеҙ йәштәштәрегеҙ өсөн, - тине ул. -Улар укыһындар тиһәгеҙ, төрлө юлдар, алымдар эҙләгеҙ”.

*Ултырышта гәзитте семестрға 2 мәртәбә сығарырға тигән карар кабул ителде. Кыҫкаһы, кыҙҙарға тик уңыштар теләйһе генә кала.*



## һүҙ - мөхәрриргә



һәр бер кешенең иң юкһынып иҫкә алған сағы ул, моғайын, студент йылдарылыр. Йәшәү дәрте ташып тороп, киләсәктә тик якшылык кына буласағына ышанып, үҙенең йәшлегенең иң матур сағын кисерә кеше. Ул сакта әле быны аңламай, иң мәшәкәтһеҙ көндәрен үткәреүенә төшөнмәй. Студент йылдары бик тиҙ үтәләр, бына мин дә үҙемдең дүртенсе курсҡа килеп етеүемдә һиҙмәй ҙә калдым.

Студент булыуы еңелдәрҙән түгел. Уның алдында торған бурыстар бик күп: иң беренсеһе, әлбиттә, укыуҙы якшы билдәләргә тамамлап диплом алыу, шул ук вакытта, колледж тормошонда ла актив катнашып, үҙенде рухи, ижади яктан үҫтереү. Укыуҙан тыш, шәхси тормош, мөхәббәт... Быларҙың барыһына ла өлгөрөргә кәрәк.

Ғөмүмән алғанда, гүзәл сактар ул студент вакыттары!

Бына ошо студент йылдарына тағын да бер биҙәк өҫтәп, беҙ гәзит сығарарға карар иттек. Төрлө яңылыктар менән таныштырып барырға, студенттар тормошон тулырак яктыртырға тигән максат куйҙык.

һәр ижади студентка ла үҙ көсөн һынап карарға мөмкинселек бар. Шуға күрә, укығыҙ, уйланығыҙ, хыялланығыҙ, уларҙы беҙҙең гәзиткә яҙып тапшырығыҙ! Туймазы педагогия колледжы студенты, кем һин?

*Абдуллина Д. (42 төркөм)*

### Гәзитебеҙҙең был һанын студенттарға бағышланык

## Студент көнө.

Күптән түгел, 25 ғинуарҙа, студент көнө үтте. Ул 2 йөҙ йылдан артык халыкка билдәле. Был көн изге Татьяна көнө тип тә, студенттар көнө тип тә атала.

Ә бына элегерәк, 25 ғинуар Изге Татьяна көнө булып кына каралған. Татьяна II быуаттарҙа йәшәгән, ул христиан динен йәшереп йөрөткән ғаиләлә тыуып, христиан динендә тәрбиәләнгән. Был динде эҙәрлекләү йылдарында Татьяна кыуылыуға дусар булған. Уны яндырырға уйлағандар, күҙҙәрен сокоғандар, тик ул үҙ динендә тоғро калған. 226 йылдың 25 ғинуарында Татьяна һәләк булған. Тик 1755 йылда ғына был көнгә Татьяна исемен биргәндәр. Сөнки 25 ғинуарҙа әбей батша Елизавета Петровна тарафынан Мәскәү университетын һәм ике гимназияны асыу хакында карарға кул куйылған. Карарҙың тексы И.Шувалов кулынан яҙылған. Ул университеттың асылыу көнөн әсәһе Татьяна Петровна исеменә бағышлаған. Шулай итеп, XVIII быуаттан алып был көн студенттарҙың байрамы итеп тә һанала.

*Әхмәҙиева З.*

## Себеште кыш һанайҙар йәки колледж студенттарының I семестрҙы тамамлауҙары хакында

2008/2009 ukыу йылының I семестры артта kалды. Зачеттар, имтихандар тапшырылды, baһалар kуйылды. Кем нисек уkыған бөтәһе лә ошонда күренә инде. Бына беҙ ҙә педколледжда уkыу барышын белергә теләп, һөҙөмтәләр яҙылған ведомостарҙы kарап сыktыk.

32-се, 11-се, 30-сы, 41-се төркөмдәргә тырышырға кәрәк икән әле. Уларҙың уkыу өлгәше һәм сифаты түбәнерәк.

Педколледждың һәүетемсә генә уkыусы төркөмдәре итеп беҙ 12-се, 26-сы, 34-се, 43-сө, 44-се, 46-сы, 53-сө һәм 57-селәрҙе атай алабыҙ. Был студенттарҙың уkыу сифаты 40-50% тирәһендә (шуны ла онотмайыk: педколледжда уkыусы төркөмдәрҙең белем сифаты юғары булырға тейеш)

Иң яkшы уkыусы төркөмдәргә түбәндәгеләрҙе индерәбеҙ: улар- 56-сы, 42-се, 33-сө төркөмдәр. Был төркөмдәрҙә белем сифаты 57-70% тирәһендә.

Ә бына 52-се төркөм студенттары 100% өлгәш һәм 100% сифат менән тамамлағандар.

Афариндар тип әйтәһе генә kала! Уйлап kараһаң, шулай булырға тейештер ҙә: беренсенән, улар инде 5 йыл уkый, икенсенән, күп тә үтмәҫ, улар уkытыусы сифатында балалар алдында торорҙар. Бөгөнгө балалар өсөн грамоталы уkытыусылар ғына авторитет. Һөҙөмтәләр беҙҙең бишенселәрҙең шундай уkытыусылар буласағына ишара яһай. Беҙ 52-се төркөмдө ихлас kотлайбыҙ.

Төркөмдәрҙең уkыу барышын башkорт теле уkытыусыһы Кәримова Г.Я. һәм 42-се төркөм студенты Әхмәҙиева З. күҙәтте.

## Уkыу алдынғылары



Йәмғиева Гүзәл, 42-се төркөм студенты



Ғәләмова Рәзилә, 42-се төркөм студенты



Асkарова Элина



## Уkыуы еңелме?

Мин I һәм IV курс студенттарының уkыуға мөнәсәбәтен белергә теләп, анкета һорауҙарына яуаптар йыйҙым.

Беҙҙең I курс студенттарының барыһына ла колледжда уkыуы оkшай. Улар шатланып уkырға киләләр, киләсәктә көслө һәм тырыш уkытыусы булырға хыялланалар. Беренселәрҙең 60-70%-ы өсөн уkыу еңел бирелә. Ниндәй проблемалар һеҙҙе борсой? тигән һорауға уларҙың бер нисәүһе алдағы уkыу ауырлашыр инде, тип яуап биргән.

Ысынлап та, уkыуы ауыр булырмы? IV курс kыҙҙарының 80%-на уkыу еңел тойола. Улар материалды еңел үҙләштерә. Төркөм эсендә яkшы мөнәсәбәт һаkлана. Күп кенә kыҙҙар икенсе уkыу йортонда белем алырға kаршы түгелдәр икән. Педколледж студенты, дүртенселәрҙең уйынса, тырыш булырға, үҙең төрлө яkлап асырға тырышырға тейеш.

Дөйөм алғанда, беҙҙең студенттар уkырға ынтылалар, минеңсә, быға kамасаулаусы бер генә kаршылыk булырға мөмкин. Ул дошман бөтәбеҙгә лә таныш-ялkаулыk. Ялkаулыkты еңәйек, дуҫтар!

*Мәсәлимова С.(42-се төркөм)*

Бер рекламала «Ял – ул ауыр хеҙмәт» тигәнде уҡырға тура килде. Ысынлап та шулай. Ял итә лә белергә кәрәк. Ә йәштәр нисек ял итә һуң?

## Шәп сактар ул каникулдар!

Алда тора ял көндәре,
Дәртләндереп күңелде.
Ауылға ҡайта студенттар.
Имтихандар бирелде.

Ҡулдарында - юл сумкаһы
Ә йөҙҙәрендә - шатлыҡ.
Урамдар шау-гөр килә,
Байрамға әҙер халыҡ!

Кискеһен клубтарҙа
Хит-музыка яңғырай.
Ауылдың сая йәштәре
Күңел асалар шулай.

Атанғолова Г. (32-се төркөм)

Бөтәһенә лә билдәле: студент йылдары һәр кешенең тормошонда иң күңелле, иҫтә ҡала торған мәле. Ул йылдарҙы минең атай-әсәйем дә ҡыҙыҡ итеп иҫкә ала, һағынып һөйләй. Әсәйем әле ошо көнгә ҡәҙәр курсташ ҡыҙҙары менән хат алыша.

Күп көс һалыуҙы талап иткән уҡыуҙан һәм имтихандар биргәндән һуң, ҡышҡы каникулдар башланды. Ошо каникулдарҙы беҙ көтөп алдыҡ, шуға күрә уның һәр көнөн, һәр сәғәтен файҙалы итеп үткәрергә тырыштыҡ.




Каникулдың бер нисә көнөн һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәм. Беренсе көн туйғансы йоҡларға тигән иҫәп булһа ла, үҫ иткәндәй, йоҡо килмәй. Тороп, еңелсә иртәнге ашты ашағас, дуҫтар менән йыйылышып катокка киттек. Һауа торошо ла беҙгә оҡшаны. Туйғансы конькиҙа шыуғандан һуң, беҙ ҡайтырға йыйындыҡ. Арыған булһаҡ та, кәйефебеҙ сиктән тыш күтәренке ине. Өйгә ҡайтып еткәнде һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ. Киҫкә тиклем арығаныбыҙ бөттө һәм үҙәк майҙанға юл тоттоҡ. Майҙан төрлө төҫтәге уттар менән балҡый. Ниндәй һоҡландырғыс күренеш! Ошолай итеп, минең беренсе ял көнөм үтеп китте.

Икенсе көн. Иртән, конькиҙа шыуғандан һуң, аяҡтар ауыртыбыраҡ торһа ла, өйҙә ултыраһы килмәй. Ҡунаҡҡа килгән ҡустымды етәкләп, ауыл клубына спектакль ҡарарға киттек. Спектакль балаларға ҙур кинәнес килтерҙе. Ә бала-сағаның шатланыуы беҙҙең өсөн ҙур ҡыуаныс. Был ҡыҙыҡлы күренеш ҡустымдың күңелендә оҙаҡ һаҡланыр. Кисен ғаиләбеҙ менән аралашып, фекерҙәр алмашып телевизор ҡараныҡ.




Өсөнсө көн. Был көндө мин үҙебеҙҙең ғаиләнең берҙәмлегенә тағы ла нығыраҡ ышандым. Бөтәбеҙ ҙә йыйылышып, саңғы кейеп урманға табан йүнәлдек. Ошо ҡәҙерле ял сәғәттәрен беҙ сәләмәтлекте нығытыу өсөн бик файҙалы итеп үткәрҙек. Ҡышҡы урман, саф һауа беҙҙә яҡшы тәьсир ҡалдырҙы.

Ҡалған ял көндәре лә шулай уҡ күңелле уҙҙы. Һәм каникулдар һиҙелмәй ҙә үтеп китте. Уҡырға дәртләнеп, күтәренке кәйеф менән килдек.

*Исмәғилева Л. (42-се төркөм)*

## Батырға ла ял кәрәк

Минең өс йыллыҡ студент тормошом мәңгегә иҫтәлектә ҡалыр ваҡиғалар, онотолмаҫ кешеләр менән бай. Дөйөм ятаҡҡа беренсе көн килеп әләккәс:"Гел дә белмәгән кешеләр менән нисек йәшәрмен икән?"-тигән уй башҡа килеп бәрҙе. Ләкин тора-бара бүлмәләш ҡыҙҙар менән таныштыҡ, дуҫлаштыҡ, бер-беребеҙгә ҡунаҡҡа ҡайтып йөрөй башланыҡ. Дөйөм ятаҡта йәшәүе – үҙе бер мөғжизәле мәл. Ҡыҙыҡтары ла була. Аҙна аҙағы етһә, ҡыҙҙар бүлмәнән бүлмәгә йөрөп, берәй ҡалаҡ тоҙ йәки шәкәр, берәй кисәк икмәк һорап тик йөрөйҙәр. Ә инде шәмбе етһә, оло юл сумкаларын буш банкалар менән тултырып, вокзал яғына ағылалар. Был инде уларҙы иң бәхетле көндәренән һанала. Ауылға ҡайтып, туғандарыңдың һағынып бөткән йөҙҙәрен күреү, мунса инеп, тамаҡ туйҙырып, кисен мәҙәниәт йортона сығып, дуҫ-иштәрең менән күрешеү, тыуған мәктәбеңә инеп, уҡытыусылар менән һуңғы хәбәрҙәрҙе белешеү – иң ҙур бәхет бит ул беҙҙең өсөн. Ләкин ял көндәре оҙаҡҡа һуҙылмай, икенсе көн тороп, тағы дөйөм ятаҡҡа бараһың һәм тағын уҡырға...

Студент халҡы ошо ауылға ҡайтҡанда ғына ял итә тип уйлай күрмәгеҙ. Сөнки дәрестәрҙән тыш уның күпме буш ваҡыты ҡала бит әле. Берәүҙәр төрлө бейеү түңәрәктәренә, берәүҙәре магазиндарҙа йөрөү менән, ә берәүҙәре инде уны йоҡлап үткәрә. Беҙ үҙебеҙ ҙә ялды йоҡлап үткәрергә яратабыҙ. Иртән уҡырға тора алмайынса йоҡлап ҡалған ваҡыттар ҙа булды, йәшермәйем. Кемдең инде иртән тәмле йоҡоно бүлеп, йылы юрған аҫтынан тороп, уҡырға барғыһы килһен?!

Ләкин ҡыш көндәрендә, һирәк булһа ла, шыуғалаҡҡа коньки шыуырға барып ҡайтҡылайбыҙ. Ә бына яҙ килһә, йоҡлап ятыу бер ҙә килешмәй, минеңсә. Ҡояш тәҙрәнән шаҡып, барыһын да тышҡа саҡыра. Бөтә донъя йәшелләнгәндә, һин нисек бүлмәлә ултыраһың инде?! Еңелсә кейенеп, биҙәнеп-төҙәнеп, ҡыҙҙар менән паркка сығып китәһең. Бына шундай беҙҙең ялдар!

*Хәйруллина Г. (32-се төркөм)*

## V курстар укыуҙарын тамамлап, төрлөһө төрлө яkka таралышты. Шулай ҙа улар менән араларҙы өҙмәйбеҙ, осрашып, һөйләшеп торабыҙ. Уларҙың хәбәрҙәре һеҙгә лә кыҙыклы булыр, тип уйлайбыҙ.

Үткән йылда беҙҙең педагогия колледжының Туған тел һәм әҙәбиәте бүлеген Климова В.И. етәкселегендә 33 студент тамамланы. Бөгөнгө көндә уларҙың күбеһе тиерлек үҙ һөнәрҙәре буйынса эшләйҙәр. Мәктәптә – 20, балалар бакcаһында – 2, башkа һөнәр буйынса – 4 кеше эшләй. 7 kыҙ декрет ялында. Кисәге студенттарыбыҙ белемдәрен артабан үҫтерергә kарар иткән: 13 kыҙ юғары уkыу йорттарына ситтән тороп уkырға ингән.

Ҡыҙыл дипломға тамамлаған Әхмәтова Динара үҙ эше хаkында илһамланып һөйләй. Бөгөнгө көндә ул Туймазы kалаһының 1-се һанлы гимназияһында башkорт теле һәм әҙәбиәтен уkыта. Беҙ уға бер нисә һорау бирҙек. Эштә уның өсөн иң kыҙығы - балаларға белем биреү, улар менән аралашыу. Иң ауыры – йәш уkытыусы тип kарап, kайһы бер синыфтарҙың тыңламауы. Киләсәктә ул төрлө бәйгеләрҙә, сараларҙа kатнашырға, призлы урындар яуларға, ғөмүмән, юғарыраk бейеклектәргә ирешергә теләй. Педколледжда алған белем уға ныk ярҙам итә. Ауыр саkтар булһа, ул беҙең уkытыусыларҙы иҫкә төшөрә. «Мин уларҙан өлгө алам,»-ти ул.

Әйткәндәй, Динара ошо арала шатлыklы ваkиға кисерә – тормошkа сыға. Беҙ уны ихлас kотлайбыҙ. Ә кисәге студенттарыбыҙға уңыштар ғына теләйбеҙ.

Башkорт теле уkытыусыһы Кәримова Г.Я. әйтеүенсә, Әхмәтова Д. kыҙыklы ижади эштәр башkарған. Һеҙгә шуларҙың береһен тәkдим итәбеҙ.

*Ибраһимова Д. (42-се төркөм)*

***М.Кәрим һабаkтары Әхмәтова Динараның яҙма эше. (Көндәлектән өҙөктәр).***




7 сентябрь. М.Кәрим ижады менән таныша башланыk. Һоkланғыс кеше! Оло, матур ғүмер кисереп, күп әҫәрҙәр ижад итеп, бөтә донъя күләмендә исеме танылған әҙип...

9 сентябрь. "Шуға күрә бөгөн тандан Күкрәгемдән коштар осорам..."

Ҡалай kыҙыklы сағыштырыу. Бөгөн көнө буйы М.Кәрим шиғырҙарын уkыйым. Йотлоғоп уkыйым! Шул хәтле матур, һоkланғыс, йөрәkkә ятып торған шиғырҙарҙы күптән уkыған юk ине. Урыҫ мәктәбендә уkығанғамы, элек мин гел урыҫ шағирҙарының әҫәрҙәрен генә уkый торғайным. Хәҙер инде М.Кәрим – минең иң яраткан шағирым. Нисек был шағирһыҙ йәшәгәнмен икән?

10 сентябрь. "Оҙон-оҙаk бала саk" повесын уkый башланым. Беренсе бүлектә үк яҙыусы үҙенең Оло инәйе тураһында һүҙ башлай. Ысынлап та, ныk ауыр саkта, кеше иң беренсе үҙенең яkын кешеһе тураһында уйлай.

14 сентябрь. Бөгөн М.Кәрим шиғриәте буйынса традицион булмаған дәрес үткәрҙек. "Шағирҙың тормош һәм ижад юлын яkшы белеүсе" исеме өсөн студенттарҙан торған өс төркөм көс һынашты. Мин, консультант булараk, төркөмдәрҙең эшен тикшерҙем, баһалар kуйҙым. Ғөмүмән, дәрес миңә оkшаны, сөнки шундай дәрестәрҙә kыҙҙарҙа бер-береһенә kарата ярҙамсыллыk, хөрмәт итеү тойғолары тәрбиәләнә.

16 сентябрь. "Ҡара һыуҙар"... Ҡалай kурkыныс исем. Был поэма миндә күп уйҙар тыуҙырҙы. Кеше ғүмере бик kыҫkа. Әммә кеше үлһә, уның хаkында яkшы йәки насар иҫтәлектәр kала. Ҡурkаklык – кеше күңелендәге иң хурлыklы тойғолор, моғайын. Ә мин үҙем ни эшләр инем? Юk! Мин үҙ илемә хыянат итә алмаҫ инем. Үҙ тыуған илем өсөн йәшәргә, үҙ тыуған ерем өсөн көрәшергә! Эйе, шундай әҫәрҙәр патриотик тойғолар уята.

20 сентябрь. "Оҙон-оҙаk бала саk" повесының "Аkйондоҙ" бүлеген уkыным. Яҙыусы иҫ китмәле мөхәббәт тасуирлаған. Ундай һөйөү хаkында kыҙҙар бәләкәй саkтан хыялланып йәшәйҙәр. Ышанам: шундай матур һоkланғыс мөхәббәт миңә лә тап булыр. Әммә мин Аkйондоҙ менән Мәрәһим һымаk бәхетһеҙ булғым килмәй. Ә кем әйтте улар бәхетһеҙ тип? Ундай мөхәббәтте осратыу – үҙе ҙур бәхет.

23 сентябрь. Уйлап ултырам: "Бер кеше шул хәтлем талантлы була ала икән. Һүҙ оҫтаһы ғына түгел, кеше күңелен аңлай белгән талантлы психолог та. Сөнки кешенең характерын, уның уй-тойғоларын тулыһынса асыр өсөн, кешеләрҙе бик яkшы белергә кәрәk. М.Кәрим үҙ әҫәрҙәрендә тормошта осраған ауырлыkтарҙы еңергә өйрәткән. Уның кәңәштәрен бер ваkытта ла онотмам, йөрәгемдә оҙаk йөрөтөрмөн".

# Ғаиләле студент булыуы еңелме?

## Бөгөнгә көндә йәштәр ғаилә коралар. “Ҡорһондар! Бәхетле булһындар!”,-беҙ шулай тибеҙ. Ә улар нимә тиҙәр?

## *Ғаиләм көс һәм ышаныс бирә*

Мин – ғаиләле студент. Минең менән бергә бәләкәс кенә улым һәм яратҡан иптәшем белем ала тиһәң дә була. Улар мине һәр иртә һайын яҡты йөҙ менән. “Тик “5”-ле билдәләре генә алып ҡайт”,- тип уҡырға оҙаталар, шунан һағынып, шатланып ҡаршы алалар. Улым бәләкәйерәк булғанға күрә, уҡыуы ауырға төшә, шуға ҡарамаҫтан, мин ауырлыҡтарға бирешмәйем. Һәр саҡ өй эштәрен эшләп килергә, ҡушҡандарҙы еренә еткерергә тырышам. Минең колледжды уңышлы уҡып бөтөрөп, диплом алып сығаһы килә. Сөнки хәҙерге ваҡытта уҡыған кеше генә кеше була ала. Мин үҙем өсөн генә уҡымайым, иң беренсе сиратта, ғаиләм, балам өсөн уҡыйым. Иң ҙур теләгем - баламдың һәйбәт, аҡыллы, белемле кеше булып үҫеүе. Ололарҙы оло итә белһен, кешеләрҙе аңлаһын, ярҙамсы булһын. Үҙемдең һәм иптәшемдең ата-әсәләре миңә бик ярҙам итәләр. Мәҫәлән, уҡыуҙан ҡайтҡансы баламды ҡайнағам ҡарай. Ошондай туғандарым булғанда, бөтә юлда булған ауырлыҡтарҙы йырып сыға аласаҡбыҙ, тип ышанам.

Һәр көн уҡырға киткән һайын, йөрәгем ярһый, сөнки кем менән генә ҡалмаһын, бала өсөн көйәләнеү тойғоларын баҫып булмай. Бала бала инде, уны бер нәмә лә алмаштыра алмай. Быны әсәй булған кеше генә аңлай ала. Мин уны бер генә минутка ла ҡалдырып китмәҫ инем, ләкин уҡыуҙың кәрәген бик асыҡ аңлайым. Киләсәктә уҡыуҙы тик һәйбәт билдәләргә генә бөтөрөрмөн, тип ышанам. Шуға, был хыялымды донъяға ашырыр өсөн, бөтә булған көсөмдө һаласаҡмын. Бының өсөн ғаиләм тик көс һәм ышаныс бирә.

*Усманова Р. (42-се төркөм)*

## *Ә беҙ ошолай ял итәбеҙ!*

Бөгөн шәмбе, уҡыу аҙнаһының һуңғы көнө. Алда бер көнлөк ял бар. Дәрестәр ҡыҫҡартылған, бөгөн тик тиҙерәк уҡып бөтөрөп, ял итәһе килә. Ял көнө етһә, башта әйткәндәрен төрлө уйҙар тыуа. Бөтә эшләнмәгән эштәренде бөтөрөргә, төрлө пландарҙы тормошҡа ашырырға. Тик быларҙы барыһы ла һин уйлағанса булмай шул. Йә һинең ваҡытың етмәй, йә бер ниндәй башҡа уйламаған хәлдәр килеп сыға.

Көндөң күп ваҡытын мин бәләкәй ҡыҙым – Илүсә менән үткәрәм. Беҙ уның менән шаярып уйнайбыҙ, бейейбеҙ, көләбеҙ, был ваҡыттар күңелле үтә. Илүсә бик шаян, матур ҡыҙ, уның менән уйнаған саҡта бөтә нәмәне лә оноторға мөмкин. Уның янында булһаң, бүтән бер нәмә лә кәрәкмәй. Халыҡ әйтә бит: «Бала – үҙе ҙур бәхет», «Балалы өй – шатлыҡлы өй». Мин был һүҙҙәр менән ризалашам. Ял көнөндә беҙ Илүсә менән тышта йөрөйбөҙ, күңел асабыҙ, мин уны санала йөрөтәм. Ҡайһы бер саҡта Илүсә рәхәтләнеп саф һауала йоҡлап китә. Мин уны йоҡлаған килеш өйгә алып керәм. Бына шунда беҙҙең өйҙә иң ҡыҙығы башлана. Беҙ, Илүсәне йоҡоһонан уятмаҫ өсөн, күбәләктәр һымаҡ бер тауышһыҙ, осоп ҡына йөрөйбөҙ. Хатта себен осҡан тауыш та сыҡмай. Мин шул ваҡытты бушҡа үткәрмәҫ өсөн, өйгә эштәремде эшләргә ултырам. Илүсә йоҡлаған ваҡытта миңә бер кем дә ҡамасауламай. Ә бына ҡыҙым уянғас, өйгә эште әҙерләү икенсе төҫ ала. Илүсә миңә ярҙам итә: ручка, дәфтәр һорай, дәфтәрҙәремә сәскәләр төшөрөп бөтә. Мин уҡығанда ул да уҡый. Беҙ ҡыҙым менән икебеҙ ҙә башҡорт теле уҡытыусылары булып сығырбыҙ инде, тип көлөп уйлап ҡуям. Был эште яҙған ваҡытта ла ул минең янымда ултырҙы, сәсемде тартҡыланы, дәфтәремдәге хаталарҙы тикшерҙе.



*Әсәйем – студентка*

Минең ғаилә булғас, эш Илүсә менән генә бөтмәй. Өй эше, ваҡ-төйәк күп була. Ашарға бешерергә, һауыт-һабалар, керҙәр йыуырға кәрәк. Былар барыһы ла минең ял көнөмдө тартып алалар. Бөтә нәмәгә лә өлгөрөргә, тырышырға! Бер үҙең ун кешелек итеп өҙөлөп эшләргә тотонаһың. Кис етеү менән, башҡа: “Ял да бөттө, иртәгә уҡырға,”-тигән уйҙар килә инә, ә һинең пландарың буйынса бер нәмә лә килеп сыҡмай. Ял ул тик бер һүҙ генә!

Уҡыуҙар дауам итә. Һәр көн дәрестән ҡайтҡас, янныма шаян сәскәм – Илүсә килеп етә. Арыуҙарым, проблемаларым онотола. Күңелем, йәнем ял ала. Донъя йәшәреп китә. Бөтә нәмә ҡулымдан килгән кеүек...

*Әбүнәғимова А..(32-се төркөм)*

**Әйткәндәй, беҙҙең педколледжда** 16 студент ғаиләле, 8 студент әсәй булған. *Атанғолова Г.*

*Шиғыр, шиғриәт. Был һүҙҙәрҙе яҙыуы, әйтеүе, ишетеүе лә күңелле. Уларҙан ниндәйҙер арбағыс көс, илаһи моң һарҡып торғандай.*

*Студенттар арһында шиғриәткә мөкиббән китеп, үҙҙәре лә шиғыр яҙғандарҙың булыуы, һис шикһеҙ, һөйөнөслө күренеш. Шуларҙың береһе менән*

*таныш булайыҡ: Атанғолова Гөлназ*




*Мин Атанғолова Гөлназ, 1990 йылдың 24 июнендә Йылайыр районының гүзәл тәбиғәтле Һабыр ауылында донъяға килгәнмен. Туймазы педагогия колледжының 32-се төркөмөндә белем алам. Киләсәктә балаларға башҡорт теленең бөтә байлығын, бөйөклөгөн еткерергә теләйем.*

*Күңелемдәге уй-тойғоларымды шиғырҙарымда сағылдырам. Күберәген яҡындарыма, тәбиғәткә бағышлайым. «Йәншишмә» гәзитендә лә баҫылып сыҡҡандары була.*

*Кешеләрҙең изгелекле, иғтирамлы, саф күңелле, батыр, талапсан, мөхәббәтле, белемле кеүек яҡшы сифаттарына һоҡланам.*

*Девизым: Кешелекле булырға! Матур тормошта үкенмәҫлек итеп йәшәргә!*

***Г***
те.
***Ба***
***Ме***
Әх[illegible]лара,
Ибраһимова Диниә,
Исмәғилева Ләйсән,
Мәсәлимова Светлана,
Атанғолова Гөлназ,
Лотфуллина Илгинә.
Беҙҙең адрес: Туймазы ҡалаһы
Комаров урамы, 36.
Беҙҙең сайт: http://www.tpkrb.ru/

### *Мин - мөхәббәт ҡошо.*

*Мин - мөхәббәт ҡошо,*
*Ә һин йөрәкһеҙ*
*Минең һөйөлгөм килә,*
*Ә һин бәғерһеҙ.*

*Боҙ кеүек туң,*
*Ҡатыһың таштай.*
*Башҡа килмәм янына*
*Осмамын ҡоштай.*

### *Атайыма.*

*Ҙур рәхмәт һиңә, атай,*
*Кәңәштәр биргәнеңә*
*Кәрәк сакта ҡаты була*
*Беләһендер һин генә.*

*Таяныс та, йыуаныс та*
*Ауыр ваҡытта булдың.*
*Ҡайғым бөтә кеүек баштан,*
*Һыйпаһа йылы усың.*

*Ҡурҡа ла инек ҡай саҡта,*
*Шөрләү түгел, хөрмәтләү.*
*Шундай рәхәт кистәрен*
*Атай менән һөйләшеү.*

*Әкиәттәр бик күп белә,*
*Ҡыҙыҡлы тарихтары,*
*Һин булғанға беҙ бәхетле,*
*Йәшәсе 100 йыл тағы!*

### *Йылайырым.*

*Ҡоштар һайрай. Таңдар ата,*
*Елдәр иҫә талғын ғына.*
*Борғолана-борғолана*
*Һаҡмар йылғаһы аға.*

*Тирә яҡты йәшләндереп,*
*Үҫә зифа ҡайындар.*
*Ел-дауылдан һаҡлайҙар*
*Ҡарағас, ҡарағайҙар.*

*Шундай матур тәбиғәтле*
*Тыуған яғым, ауылым,*
*Йөрәгемдә уйылған*
*Минең Йылайырғынам.*

### *Йырла, егет.*

*Моң ағыла, егет йырлай,*
*Сихри иленә әйҙәй.*
*Яғымлы ла, һағышлы ла,*
*Шулай арбарға теләй.*

*Күҙҙәрендә осҡон уйнай,*
*Шаян да ул, уйсан да.*
*Бар донъяны таң ҡалдырып,*
*Йырла әле тағын да.*

*Йырла, егет, йырла тағы,*
*Тирә яҡ моңға тулһын,*
*Йөрәктәрҙе арбаһын да*
*Мәңге күңелдә ҡалһын.*

*Йәшәү көсө өҫтәй бит йыр!*

### *Хат*

*Хат яҙам, ҡулдар дерелдәй,*
*Йәш эркелгән күҙҙәргә,*
*Бик нык һағынһам да һине,*
*Мин тейешмен түҙәргә.*

*Ике йыл әрме сафында*
*Һин йөрәйһең йыраҡта.*
*Беләм, ҡыйын, һағынаһың,*
*Төнөн тораһың һаҡта.*

*Иҫлә мине, ҡайғырғанда,*
*Шатлыҡта ла онотма,*
*Ауырлыҡтар була ҡалһа,*
*Нык бул, ағай, һынатма!*